РЕСПУБЛИКАНСКАЯ ОЛИМПИАДА ШКОЛЬНИКОВ НА КУБОК имени Ю.А. ГАГАРИНА

2021-2022 учебный год

КУБОК ГАГАРИНА олимпиада школьников

# БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК

ШКОЛЬНЫЙ ЭТАП

7 класс

***Максимальное количество баллов за задания:***

| Задания | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | Сумма |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Количество баллов | 2 | 4 | 6 | 5 | 4 | 5 | 5 | 10 | 5 | 5 | 6 | 8 | 65 |

***Все оценки должны быть целыми числами, дробные оценки не допускаются!***

## ОТВЕТЫ И РЕКОМЕНДАЦИИ ДЛЯ ПРОВЕРКИ

| *Һорауҙың тәртибе* | *Аңлатма* | *Иң юғары иҫәп (балл)* |
|---|---|---|
| **1-се һорау** | һәр дөрөҫ яуапҡа берәр балл:<br>**Ъ, ь** | **2 балл** |
| **2-се һорау** | Дөрөҫ һәм тулы яуапҡа 4 балл, тулы булмаһа 2 балл, дөрөҫ булмаһа, балл ҡуйылмай:<br>**Алмаш, сөнки ул үҙ-аллы мәғәнәне белдермәй** | **4 балл** |
| **3-сө һорау** | Дөрөҫ яуапҡа берәр балл:<br>**Төп килеш – мәктәбең** **Төшөм – мәктәбенде**<br>**Эйәлек –мәктәбеңдең** **Урын-ваҡыт – мәктәбеңдә**<br>**Төбәү – мәктәбеңә** **Сығанаҡ – мәктәбеңдән** | **6 балл** |
| **4-се һорау** | Һөйләмдәр дөрөҫ төҙөлһә, 5 балл ҡуйыла, 1-2 хатаға – 3 балл, 3-4 хатаға – 2 балл, унан күп хатаға балл ҡуйылмай:<br>**Көҙ көнө күл бар йәнлелеген юғалта. Ҡыр өйрәктәре һәм башҡа ҡоштар өйөр-өйөр булып йылы яҡҡа китәләр. Күл өҫтөн бөжөрләндырып уйнап торған балыҡтар ҙа һикереүҙәренән туктай. Был ваҡытта күл тирәһендә кешеләрҙе күреп булмай. Улар ҙа бында килмәй башлайҙар.** | **5 балл** |
| **5-се һорау** | Һәр дөрөҫ яуапҡа берәр балл ҡуйыла:<br>**Арыш – рус теле** **Һабын – фарсы теле**<br>**Китап – ғәрәп теле** **Урман – башҡорт теле** | **4 балл** |
| **6-сы һорау** | Дөрөҫ яуапҡа берәр балл:<br>**Дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп көйрәтер.**<br>**Дуҫ көлгәндә беленмәй, бөлгәндә беленә.**<br>**Дуҫты мең тапҡыр һынамайҙар.**<br>**Дуҫың янында булмаһа, донъяның йәме юҡ.**<br>**Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын.** | **5 балл** |

| *Һорауҙың тәртибе* | *Аңлатма* | *Иң юғары иҫәп (балл)* |
|---|---|---|
| **7-се һорау** | Дөрөҫ яуапҡа бирәр балл:<br>**Фәрит урманда йөрөргә ярата. Урманда бик рәхәт.**<br>**Урман да яҡлауға мохтаж. Беҙ күмәкләп урманда еләк йыябыҙ.**<br>**Урман да кешеләргә ҙур ярҙам күрһәтә.** | **5 балл** |
| **8-се һорау** | Дөрөҫ яуапҡа бирәр балл.<br>**Омскиға** **Ноябргә**<br>**Киоскыға** **Июлгә**<br>**Танкыға** **Повеска**<br>**Кофеға** **Грамға**<br>**Римға** **Донбасска** | **10 балл** |
| **9-сы һорау** | Дөрөҫ ҡуйылһа, 5 балл, 1 хата – 4 балл, 2 хата – 3 балл, 3 хата – 2 балл:<br>**Оҙон, күңелһеҙ ҡыш үтте. Ҡарҙар иреп, һыуҙар аға башланы. Ер йөҙө ҡояш нурына мансылды, йылы яҡҡа киткән ҡоштар кире әйләнеп ҡайта башланылар. Сыйырсыҡтар ҙа килгән. Ысынлап та, бик һағынып ҡайтҡандар улар. Дәрттәре, шатлыҡтары эстәренә һыймай, шулай күңелләнеп һайрайҙар.** | **5 балл** |
| **10-сы һорау** | Дөрөҫ яуапҡа бирәр балл:<br>**“Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” – М. Кәрим**<br>**“Айбикә” – Һ. Дәүләтшина**<br>**“Атай икмәге” – Ф. Аҡбулатова**<br>**“Ҡыр ҡаҙы” – М. Ғафури**<br>**“Һарыбай” – Р. Байбулатов** | **5 балл** |
| **11-се һорау** | Динис Бүләков, тип яҙһалар 3 балл, уның тураһында тулы мәғлүмәт бирһәләр, өҫтәп 3 балл ҡуйыла, тулы булмаған мәғлүмәткә – 1 йәки 2 балл:<br>**Башҡорт яҙыусыһы, журналист һәм йәмәғәт эшмәкәре. 1973 йылдан – СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы. 1986-1988 йылдарҙа Башҡорт АССР-ының Телевидение һәм радиотапшырыуҙар буйынса дәүләт комитеты рәйесе, артабан 1995 йылдағы вафатына тиклем — Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (1992) һәм Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы (1993), шулай уҡ Ғәлимов Сәләм (1980), Фәтих Кәрим исемендәге (1999) премиялар лауреаты.**<br>**Китаптары һәм әҫәрҙәре тураһында ла мәғлүмәт булырға мөмкин.** | **6 балл** |
| **12-се һорау** | Йөкмәткеһе өсөн – 2 балл,<br>уҡыусының телмәре өсөн – 3 балл,<br>грамоталылығы өсөн – 3 балл ҡуйыла | **8 балл** |